# Мосолмандар ҡор йыйҙы

Әлиә ҒӘЛИМОВА

***Декабрҙә Пермь ҡалаһында “Мосолман донъяһы-2009” тигән төбәк-ара мосолман мәҙәниәте форумы үтте. Бында халыҡ иғтибарына ислам дине тәғлимәттәренә һәм ҡануниәтенә таянып йәшәгән мосолман халыҡтарының әҙәби-мәҙәни ҡомартҡылары тәҡдим ителде. “Был оло форумға Волга буйы федераль округының бөтә төбәктәре, шулай уҡ күрше төбәктәрҙән мосолмандарҙың Диниә назараттары, мәсеттәр вәкилдәре саҡырылды”, - тине Пермь крайы Диниә назараты вәкиле Ильяс Вәлиев.***

Пермь крайы мөфтөйөнөң Социаль һәм иҡтисади сәйәсәт буйынса кәңәшсеһе Хәлим Шәрәфиев билдәләүенсә, был дини сараның төп маҡсаты - Кама буйында йәшәгән башҡорт, татар, азербайджан, тажик, үзбәк, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ һәм башҡа милләттәрҙең рухи-мәҙәни мөмкинлектәрен киңәйтеү, Пермь крайында һәм күрше төбәктәрҙә конфессия-ара мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү.

Атап әйткәндә, форум сиктәрендә мосолмандар һәм православие дине вәкилдәре араһында дин тураһында әңгәмәләр, төбәктәрҙең Диниә назараттары вәкилдәре ҡатнашлығында “түңәрәк өҫтәл”дәр, хәләл ризыҡ, дини баҫмалар күргәҙмәһе, киң сауҙа ойошторолдо.

Мәртәбәле форумда республикабыҙҙан Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәте ҡатнашты. Пермь крайы мосолмандары Диниә назаратының “Тарикъ” гәзите мөхәррире Розалия Савукованың тырышлығы менән нәшриәттең дини баҫмалары тураһында уҡыусыларға байтаҡ мәғлүмәт еткерелде. Нәшриәт вәкилдәре тәрән йөкмәткеле әҙәбиәт, мосолман китаптарынан ғына торған күргәҙмә ойошторҙо. Килгән ҡунаҡтарға, дин әһелдәренә изге Ҡөрьән Кәрим китабы оҡшаны, юғары баһаланды. 2010 йылға мосолман календарҙарын, М. Ғәләмовтың “Әхләҡ гүзәллектәре” китабын халыҡ күпләп һатып алды, Башҡортостан мәҙәниәтенә, тәбиғәтенә һәм тарихына ҡағылған башҡа төр әҙәбиәтте лә бик оҡшатты. Белешмә әҙәбиәт һәр ваҡытта ла ҙур һорау менән файҙалана. С.И. Руденконың “Башҡорттар” (“Башкиры”) Ә.З. Әсфәндиәровтың “Ауылдар тарихы” (“История сел и деревень”), йәнә күп һүрәтле төҫлө фотоальбомдар ҙа үтемле булды.

Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан “Китап” нәшриәтен был оло форумда үҙе нәшер иткән китаптары менән халыҡтар араһында мәҙәниәтте, конфессия-ара мөнәсәбәттәрҙе үҫтереүгә ҙур өлөш индергәне өсөн Пермь крайы мосолмандарының Диниә назараты диплом һәм грамота менән бүләкләне. “Китап” нәшриәте мөфтөй хәҙрәт Мөхәммәтвәли Хужинға үҙенең оло рәхмәтен белдерҙе.

Төбәк-ара мосолман форумына илебеҙҙең төрлө төбәктәренән килделәр. Пермь крайы, Башҡортостан, Татарстан, Удмурт, Коми республикалары, Мәскәү, Һамар, Свердловск, Силәбе, Төмән, Киров өлкәләре, Үзбәкстан, Тажикстан, Ҡаҙағстан республикалары вәкилдәре дини әҙәбиәттәре, иҫтәлекле ҡомартҡылары, киң йөкмәткеле күргәҙмәләре менән шатландырҙы.

# Хаҡ юлдан

***“Иң мөһиме - йөрәгеңдә Аллаһ булһын”, - ти Гөлшат менән Гөлназ***

Әкрәм НУРЕТДИНОВ

***Ислам ғилеме бик ҙур һәм тәрән. Ғүмер буйы өйрәнһәң дә, һис туйырлыҡ, ялҡырлыҡ түгел. Иман - ғилемдән, ғилем иһә мәғлүмәттән башлана. Исламдың иң төп мәғлүмәте - Аллаһтың барлығын белеү, таныу. Аллаһ бар һәм Ул берҙән-бер. Уның һис бер ише юҡ. Уға тиң, Уның кеүек һис бер зат юҡ. Ошо һүҙҙәрҙе аңлап, йәне-тәне менән ҡабул итеп, ислам шәриғәте буйынса йәшәүселәр араһында йылдан-йыл йәштәрҙең артыуы - ҡыуаныслы күренеш.***

Мәсәғүт педагогия колледжының V курс студенттары, булаçаҡ башланғыс кластар уҡытыусылары Гөлшат һәм Гөлназ Шәмсетдиноваларҙың яҡшы уҡыуы, күркәм холҡо менән бергә ысын күңелдән Аллаһтың барлығын танып, ислам динен ҡабул итеүе оло ихтирам тойғоһо уята.

Тәүҙә ислам дине нигеҙҙәрен уларға әсәләренең бер туған ағаһы Әбдрәзаҡ хажи өйрәтә. Ҡыҙҙар 8-се класта уҡығанда тәүге намаҙҙарына баҫа.

Ҡыйғы районының Вәкийәр ауылы мәктәбенән һуң колледжға уҡырға ингәс тә, улар дингә тоғро ҡала һәм уның ҡанундары менән йәшәй.

- Әгәр ҙә йөрәгеңдә Аллаһ булһа, ҡайҙа ғына барһаң да, ислам ҡанундарын үтәү өсөн ҡамасаулыҡ юҡ, - ти ҡыҙҙар.

Улар Мәсәғүт мәсетендә ойошторолған уҡыуҙарҙа ғәрәп алфавитын өйрәнә, хәҙерге ваҡытта Ҡөрьәнде үҙ аллы уҡыйҙар. Киләсәктә белемдәрен арттырыу маҡсатында Рәсәй ислам университетына уҡырға инергә хыялланалар.

**Һорау - яуап**

# Рухтарыбыҙҙы ҡотҡарығыҙ!

Һаумыһығыҙ “Рисәләт” гәзите редакцияһы. Күңелемде борсоп торған бер һорау менән мин дә һеҙгә мөрәжәғәт итергә булдым.

Беҙҙең Әбйәлил районының күп ауылдарында әле мәсет һалынмаған. Беҙҙең ауыл да шул иҫәпкә инеп килде, быйыл ғына ун йыл тигәндә мәсет төҙөлдө. Матур ҙур яҡты мәсеткә ауылдаштарымдың да көсө күп булды. Уларға ҙур рәхмәт.

Был мәсеткә йөрөүселәр әлбиттә, бик күп түгел, бармаҡ менән һанарлыҡ. Ололарҙы ла ылыҡтырып саҡырып ҡараныҡ, әммә уларҙың яуабы әҙер: “Ул мәсет батаныҡы”. Беҙ ҙә шул мәсеткә йөрөйбөҙ, ул батаға ҡушылмайбыҙ тип аңлатырлыҡ түгел хәл, шуға һеҙгә мөрәжәғәт итергә булдым.

Мәсет асылыуға бер аҙна үттеме-юҡмы батасылар мәсеттең үҙендә бата бирә башланылар, йома намаҙынан һуң был хәлде йыш күрергә була.

Бынан өс йыл элек ауылда йәш ғаилә, “бата” исемле бер төркөм кешеләрҙе йыйып, ҡорбан салып, кешеләргә бата бирҙеләр. Бата тигәндәре үлгән кешеләрҙең йәндәрен саҡырып киләсәген йәки юғалған малын, бик тә булмаһа кемдең кем тураһында нимә уйлауын, кемдең кем менәндер йөрөүен һорау, минең аңлауымса. Батасы тәүҙә аят уҡып кемдеңдер йәнен саҡыра, унда йә үҙеңдең олатай-өләсәйең, йә Мөжәүир хәҙрәт йәки Зәйнулла ишан һәм башҡа әүлиәләр килә.

Бата алған кеше намаҙҙағы кеүек башын бер аҙ эйә биреп, ҡулын түшенә ҡаушырып, аяҡ үрә тороп тыңлай. Батасы Фәрит һамаҡлап әйтә башлай: “Әй, балам, балам һин шулай иткәнһең, һин былай иткәнһең йәш сағыңда (ҡылған гонаһтарын һанап сыға) ҡылғандарың өсөн үкенмә, һин, тәҙәлерһең, “балам”. Ары шулай “балам” тигән бер һүҙ менән рифмалаштырып дауам итә Фәрит. Кеше үҙе ҡылған гонаһтарға үкенмәй икән, ул тәүбәгә лә килмәй тигән һүҙ. Кемдер шул рәүешле генә тороп тыңлап бөтә, кемдер илай, кемдер туктай алмай көлә.

Ҡайһы саҡта кемдеңдер үлерен дә алдан әйтеп ыҫкындыралар, нисек ниндәй хәлдә был яҡты донъя менән хушлашҡанын күрәзәселек итә. Был хәлгә күптәр шаһит. Мөжәүир хәҙрәттең ҡәберенә зыярат ҡылырға барғанда Азат исемле егеткә: “Һин күп эсәһең, тартаһың, ҡыҙҙарҙы ла күп алмаштыраһың икән”, - тигәс Азат: “Мин ошо 18 йәшемә тиклем эскәнем дә, тартҡаным да юҡ, ҡыҙым минең берәү генә, ниңә алдайһығыҙ”, - тине. Шунан Ғәлиә исемле батасы ҡыҙып китте лә Азатҡа: “Бер йылдан һин аварияла үләһең”, тип һөрәнләргә тотондо. Ғәлиәнең үҙен сак туктаттылар. Ауылда әсәһе үлгәс атаһы менән эсмәй генә йәшәп ятҡан Вилданды әсәһенең әхирәте батаға алып барған. Батала: “Һин ошо килеш эсеп йөрөһәң, эсеп үләһең”, - тигәндәр. Хәҙер егет йыл ярым тирәһе туктамай, миңә, бата эсеп үләһең тине, тип эсә. “Күрәҙәлек ислам динендә тыйылған”, - тиһәң “Бында күрәҙәлек юҡ, әруахтар әйтә”, - тиҙәр, Бата биреүсе Фәрит, үле менән һинең араңда телефон һымаҡ, әруах әйткәнен генә һиңә еткерә, уның (батасының) теле әруахтар килгәндә булмай, заман ахыры килгән, шунлыҡтан үләләр ярҙамға килә”, - тип аңлата ауыл имамы Данил ағай.

Ауылымдың бөтә халҡы ла тулы иман юлында булмаһа ла, ауыл ололары батаны хупламай. Оло-оло инәйҙәр: “Ҡөрьән” ҡушмаған эш ул. Беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ уның кеүек менән булманылар күргән-ишеткән нәмәбеҙ түгел. Ололарҙы ышанмағаны өсөн төрлө һүҙҙәр менән ҡурҡытып ҡарайҙар.

- Бына килер әле шундай ғазап, нисек батаға ышанғаныңды һиҙмәй ҙә ҡалырһың, - мәсетте лә, әлеге батаны ла етәкләп килеүсе имам Данил ағай.

Ике йәш ҡатынды көслә сихырсылар тип бата килеп ингәндән бирле нахаҡ рәнйетәләр, кем уларҙың сихырлағанын күргән һуң? Батала сығыа тип кешене шулай илатырға мөмкинме ни? Ә ул ҡатындың береһе Өфө мәҙрәсәләренең берендә белем ала, ул бата килмәҫ элек уҡырға ингәйне, иман юлындағы кешенең сихыр менән булыуы мөмкин түгел. Дини байрамдарға саҡырһаң, матур итеп аяттар уҡып ултыра. Ауылдан береһе ауырып барһа, әлеге ике ҡатындың сихыры, тип әйтә Фәрит. Миңә лә шуларҙың эше ул тип сығарҙы. Тәүбәмә килеп намаҙ уҡыным аҙаҡ.

Өс йыл эсендә ауылда үлем осрағы йышайҙы. Бер айҙа ике, унан өс кешене ерләнеләр Үлемһеҙ бер ай ҙа булғаны юҡ. Нимә тип уйларға ла белеп булмай. Ололар йән килеүен килһә, яңғыҙ китмәйҙәр инде, тип дәлилләйҙәр.

Район имамы ла ҡаршылыҡ күрһәтә алманы. Закон менән булһа ла тыйырға кәрәк ине уларҙы. Үҙҙәре араһынан бата биргән бер йәш ҡатын аҡылдан шашып, Белорет больницаһында дауаланып ҡайтты. Бата биргәндәр былтыр ҡумәкләп Зәйнулла ишандың зыяратына аят уҡырға барғанда бер батаһы йәш ҡатын үлеп ҡайтты. Ниңә һуң ауырырын белеп дарыуын алып бармаған. Ул бит быуылыу менән яфаланған.

Авгуҫт айында ғына 25 йыл йәшәгән бер ғаилә шул бата арҡаһында айырылды лә - иренә ҡатының сихырсы тип әйткәндәр, шуға тиклем матур йәшәгән ғаилә тарҡалды, балалар етем ҡалды. 13 йыл йәшәгән ғаилә лә айырылды. Уларҙы ла ҡатынын нисектер ылыҡтырып алдылар. Ире кире йәшәйек тип әйтеп ҡарағайны, бата айырылырға ҡушты тип, ҡатыны башҡаса бармаған.

Тағын шуныһы аптырата: намаҙҙары ҡабул булған-булмағанын, ҡорбандарының ҡабул булған-булмағанын әлеге әруахтан һорайҙар. Бер йәш килен (балалары бәләкәс әле), намаҙ уҡырға ҡуштылар - тип биш ваҡыт намаҙға торғайны, бата алған ваҡытта һинең намаҙҙарыңдың иртәнгеһе генә ҡабул ителә, ҡалғандарында балаларың ҡамасаулай икән, ҡабул түгел, тине батасы. Намаҙ ҡабул булһын тип Аллаһы Тәғәләнән үтенеп кенә һорап, доға ҡылабыҙ. Ҡабул булған-булмағанын иҫбат итә алмайбыҙ, Аллаһы Тәғәлә генә белә. Белемһеҙ ябай ауыл халҡын рәхәтләнеп алдайҙар. Йыш ҡына үҙҙәренең бәләкәй хаж тип йөрөткән Ҡаҙағстан еренә хаж ҡылып ҡайталар, унда барып ҡайтыр өсөн 20 мең тирәһе аҡса китә. Бата биреп кешенән йыйған аҡсаға сығып килеүе ауыр түгелдер, ә бар бит етешмәй йәшәгән ғаиләнән дә, әруахтар ҡушты тип Ҡаҙағстан яғына сығарғандары. Уҡыусылар ҙа бар, малдарын тотоноп эшенән китеп Ҡаҙағстанға барыусылар. Кире ҡайтыуға мал да, эш тә юҡ. Кире тергеҙергә күпме һәм көс ваҡыт кәрәк.

Уҡыу башланыу менән уҡыусы балалар ҙа күпләп йөрөй башлай (кемгә ниндәй баһа кәрәк). Беҙҙең имам “Ғәлиә” мәҙрәсәһенә уҡырға инде. Ул уҡыу менән батаны нисек бергә куша һуң? Яуап табыуы ауыр. Ошо яҙғандарымды иҫәпкә алып барыһын да ентекләп тикшерһәгеҙ ине, минең ауылым халҡына ярҙам итегеҙ инде, улар аҙашыу хәлендә. Килә алһағыҙ, мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт менән ҡумәкләп килеп китегеҙ. Һеҙгә мөфтөйҙәр менән кәңәш-ләшһәгеҙ ҙә була бит, беҙҙә ундай мөмкинселек юҡ инде. Яуапты мин “Рисәләт” гәзите аша ла көтәм. Гәзитте тотоп, өй һайын йөрөп уҡытып сығырға ла ризамын, тик яуап ҡына яҙығыҙ. Әле бик күптәр ҡайһы яҡҡа барырға белмәйҙәр, һеҙҙең яуапты уҡыһалар, ысын дин юлына баҫырҙар, тип ышанам Аллаһы Тәғәлә бойорһа. Амин!

Ҡәҙерле “Ғәлиә” мәҙрәсәһе һәм мәҙрәсә хеҙмәткәрҙәре, “Рисәләт” гәзите редакцияһы хеҙмәткәрҙәре! Һеҙҙең барығыҙға ла иҫәнлек-һаулыҡ, ғаилә бәхете, татыулыҡ, сабырлыҡ һәм ғүмер ахрынаса иманығыҙ юлдаш булып, тынғыһыҙ эшегеҙҙең яҡшы барыуын һәм татлы емештәрен күреп шатланып эшләүегеҙҙе, бәхетле йәшәүегеҙҙе теләйем.

***Һеҙҙән яуап көтөп ҡалыусы Әминә.***

Хатҡа Әйүп Хәҙрәт Бибарсов, мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллиндың беренсе урынбаҫары яуап бирә:

**Мәрхүмдәрҙең рухтарына табыныу - мәжүсилек замандарынан ҡалған нәмә. Ислам динендә ул ҙур гонаһтарҙың береһе булып һанала. Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһының күп гонаһтарын кисерер, әммә быны һис ҡасан ярлыҡамаҫ. Аллаһы Тәғәлә бындай кешеләргә йәннәтте тыя.**

**Беҙ иң тәүҙә пәйғәмбәрҙәр, сәхәбәләр, әүлиәләр рухтарына доға ҡылабыҙ.**

**Мәрхүмдәрҙең ҡәберҙәренә зыярат ҡылыу, уларҙы иҫкә алыу, хөрмәт итеү, рухтарына доға ҡылыу - изге эш. Әммә ниндәйҙер табыныуҙар Ислам дине ҡанундарына тап килмәй.**